БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫНЫҢ ҒАФУРИ РАЙОНЫ
ЮЛЫҠ АУЫЛЫНЫҢ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ
ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ

| | | |
|---|---|---|
| МБ етәксеһе: | Килешелде | Раҫланды |
| Протокол №1 | Уҡытыу-тәрбиә эштәре б-са | Приказ №_____ |
| «____ » август 2025 й. | директор урынбаҫары: | «___» __________2025й. |
| | ___________ /Юлыҡова С.Ә/ | Директор________________ |
| | | /Ғафарова Э.Т./ |

“Туған (башҡорт ) теле”
Предметынан эш программаһы
6,8,9-се кластар
төп дөйөм белем биреү
2025-2026 уҡыу йылы

Төҙөнө: юғары категориялы
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Яҡшыбаева Альмира Әхмәт ҡыҙы

2025й.

АҢЛАТМА ЯҘЫУ

“Башҡорт теле” буйынса эш программаһы түбәндәге документтар нигеҙендә төҙөлдө:
Рәсәй Федерацияһының “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” федераль законы (29 декабрь, 2012 йыл, № 273- ФЗ);
Башҡортостан Республикаһының “Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында” законына (1 июль, 2013 йыл, №696-з);
*“Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” Рәсәй Федерацияһы Законы (25 октябрь 1991 йыл, № 1807-1)*
*“Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законы*
*(17.03.2003, № 482-з, 28.12.2009, № 192-з.)*
Төп белем биреү федераль дәүләт стандарттарының фундаменталь нигеҙе.
М: Просвещение, 2011.
Төп белем биреү федераль дәүләт стандарттары. – М:Просвещение, 2011
Төп дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәре өсөн башҡорт теле буйынса өлгө программалар З.М. Ғәбитова- Өфө: Китап,2017
Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәр өсөн Башҡорт теленән программалар.V-X кластар өсөн.В.Ш.Псәнчин,Ю.В.Псәнчин.- Ижевск, Книгоград- 2008.
Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған программа Юлыҡ төп дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһының Уҡыу планына ярашлы тормошҡа ашырыла.

Уҡытыу – методика комплекты түбәндәге әҙәбиәт менән тәьмин ителә:
- Башҡорт теле, 5 класс. В.Ш. Псәнчин, Ю.В. Псәнчин. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте. Өфө - 2017.
- Башҡорт теле, 6 класс. Х.А.Толомбаев, Х.В.Солтанбаева, Л.С.Балапанова. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте. Өфө - 2017.
- Башҡорт теле, 8 класс. Л.Х.Сәмситова, С.А.Таһирова. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте. Өфө - 2017.
- Башҡорт теле, 9 класс. В.Ш.Псәнчин, Ю.В.Псәнчин. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте. Өфө - 2017.

Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә, белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уҡыусыларҙың үҫтереүсе уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора. Туған тел башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә нигеҙ булып тора һәм башҡорт әҙәбиәтенең рухи тел байлығын үҫтереүгә булышлыҡ итә, уҡыусыларҙы кешелектең мәҙәни тарих тәжрибәһенә ылыҡтыра. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һайлау формаһы булараҡ, башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралаша белеү, шул һөҙөмтәлә уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль әүҙемлек шәхес тормошоноң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе ҡылыҡһырламаһы булып тора. Туған тел баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе, үҙҡылыҡтарына дәлилле баһа биреү мөмкинлеген үҫтерә.

Мәктәпкә юғары мәҙәниәткә эйә булған, грамоталы, һәр яҡтан камил булып өлгөргән, ил алдындағы изге эштәрҙе башлап йөрөүсе шәхестәр әҙерләп сығарыу бурысы

йөкмәтелгән.Ул мөһим бурысты заман талабына ярашлы хәл итеүҙә әсә теле ҙур роль уйнай.

Башҡорт әҙәби теле-башҡорт милли мәҙәниәтенең нигеҙе, шуға күрә мәктәптәрҙә уны өйрәнеүгә төп урын бирелә. 5-9 сы кластарҙың программаһы әсә теленән булған барлыҡ эштәрҙең йөкмәткеһен һәм йүнәлештәрен үҙ эсенә ала. Ул йүнәлештәрҙең иң мөһиме-башҡорт теле һәм башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә белем менән бер рәттән тәрбиә биреүҙе тығыҙ бәйләнештә алып барыуҙы үҙ эсенә ала.

Программала уҡыусыларҙың туған телгә, һүҙгә булған ҡыҙыҡһыныуын һәр саҡ үҫтерә барыу, туған телдең байлығын, төрлө һүрәтләү сараларын күрһәтеү, һүҙ һәм уның формалар төрлөлөгөн ҡулланыуға ынтылыш тәрбиәләү, уҡыусыларҙы туған телдән аңлы белем алырлыҡ итеп уҡытыу бурысы тора.

Теоретик белешмәләрҙе үҙләштереү уҡыусыларҙың тел факттарын сағыштырыу, төркөмләү, фонетик, морфологик, синтаксик, орфографик, пунктуацион һәм башҡа төрлө анализ яһау кеүек практик эштәр барышында тормошҡа ашырыла. Әсә теле уҡыусыларҙың грамоталы яҙыу һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы һөйләү телмәрен үҫтереү аша тормошҡа ашырыла. Орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе өйрәнгәндә, уҡыусыларҙың ҡағиҙәләрҙе аңлы үҙләштереүҙәрен, хәтерҙә тотоуҙарын тәьмин итеү, ҡағиҙәләрҙе миҫалдар менән дәлилләй алыуҙарына, ғәмәлдә дөрөҫ ҡулланыуҙарына ирешеү мотлаҡ шарт булып ҡала.Башҡорт тел программаһының һәр бүлеген, һәр темаһын өйрәнеү уҡыусыларҙың фекерләүен, телмәрен үҫтереүгә ярҙам итергә тейеш.

Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:

уҡыусыларға башҡорт теленең фонетикаһынан, лексикаһынан, һүҙьяһалыш менән грамматикаһынан, стилистикаһы менән пунктуацияһынан, шулай уҡ телдең ижтимағи тормоштағы функцияһы, телдең үҫеше хаҡында программала билдәләнгән күләмдә ныҡлы белем биреү;

уҡыусыларҙың фекерләүен, таныҧ-белеү һәләтлелеген үҫтереү;

уҡыусыларҙа әсә теленең һүҙ байлығына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;

уҡыусыларҙы, телдең орфоэпик, интонацион нормаларын күҙәтеп, дөрөҫ, асыҡ һәм тасуири уҡыу күнекмәләре менән ҡоралландырыу;

балаларҙың орфографик һәм пунктуацион күнекмәләрен үҫтереү;

башҡорт теленең байлығын, тасуирлау мөмкинлектәрен асыу аша уҡыусыларҙа туған телде өйрәнеүгә әүҙем ҡыҙыҡһыныу, туған телгә, туған халыҡҡа, Ватанға тоғролоҡ һәм һөйөү, ғәҙеллек, донъяға киң ҡараш, кешеләр араһында татыулыҡ, ата-әсәгә, туған халыҡтың быуаттар буйына тупланған тормош ҡағиҙәләренә, әхлаҡ нормаларына хөрмәт тәрбиәләү.

Уҡыу предметына (курс) дөйөм ҡылыҡһырлама

Башҡорт теле курсының йөкмәткеһе белем биреү процесында метапредмет һәм предмет маҡсаттарына өлгәшеүгә йүнәлдерелгән. Был үҙ йәһәтендә коммуникатив, тел , лингвистик һәм мәҙәни компетенцияны формалаштырыуҙы һәм үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Коммуникатив компетенция телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, аралашыуҙы, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәрендә аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

Тел һәм лингвистик компетенция йәмғиәт күренеше буларaҡ,тел тураһында тейешле белемдә үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен,хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү, һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу, фән булараҡ, лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәрен кәрәкле булған тел күренеше

фактарын анализлау, баһалау мөмкинлеген формалаштырыу, төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

Мәҙәни компетенция туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, милли-мәҙәни компетентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү, кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итеүгә һәләтле булараҡ, функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталылыҡтың мөһим индикаторы - предмет-ара статус:
коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тиңдәштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу, телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү, ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү, аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау);
танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (проблеманы асыҡлау,дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлай белеү,тезис килтереү,библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәт алыу, уҡыу маҡсатын асыҡлау, мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу, мәғлүмәтте системаға килтереү, киренән эшкәртеү, уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү);
регулятив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм асыҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү, үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялауҙы тормошҡа ашырыу). Шулай итеп,башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.
Уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны.
Юлыҡ төп дөйөм белем биреү мәктәбенең йыллыҡ уҡыу планына ярашлы башҡорт теле 5 класта – 68 сәғәт, 6 класта – 68 сәғәт, 8 класта – 68 сәғәт, 9 класта – 35 сәғәт өйрәнелә.
Уҡыу предметы йөкмәткеһенең дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы (йүнәлеше)

Мәктәптә башҡорт телен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана; коммуникатив мәҙәниәте үҫә; дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында, башҡорт халыҡ ижады үрнәктәре һәм текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә; сит мәҙәниәткә ҡарата толерантлыҡ формалаша.

1.Предметты өйрәнеүҙә шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре
Шәхси һөҙөмтәләре :
башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау, туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү, милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү, үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү, үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Метапредмет һөҙөмтәләре.

1.Телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү;

Тыңлау һәм уҡыу

телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер, төп һәм өҫтәлмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; аудирование менән эш итеү(һайлап алыу, танышыу);
төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге ( матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;
һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә тыңлау һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙаллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу.

## ПРЕДМЕТ ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ:

Башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик реусурстары, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
Телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын аналаизлау һәм таяныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;
Һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик,һүҙъяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә  синтаксик анализ, төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
Тел-һүрәтләү сараларын  һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу;
Туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

### Һөйләү һәм  яҙыу:

алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
тыңлаған йә уҡылған тексты тәкдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү.конспект, аннотация) һөйләй алыу;
төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу) үҙләштереү;
ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу,йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү, грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу, үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау, бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;
2.Алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү, туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу, тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ.б.) ҡулланыу;
3.күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу, формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

2.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

6 класс

Әсә теле тураһында әңгәмә.

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау

Лексика

Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең һүҙлек составы.

Башҡорт әҙәби теленең дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәре. Халыҡ-ара һүҙҙәр. Профессиональ һүҙҙәр. Иҫкергән һүҙҙәр. Яңы һүҙҙәр. Диалект һүҙҙәр.

Нығынған һүҙбәйләнештәр.

Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе нығынған һүҙбәйләнештәрҙе диалект һүҙҙәрен таный белергә һәм телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү. Һөйләмдәргә һәм текстарға лексик анализ яһау.

Исем.

Исем тураһында үтелгәнде ҡабатлау. Исемдәрҙең һан мунән үҙгәреше. Исемдең ялғауһыҙ ҙа күплек мәғәнәһен белдереүе. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше.

Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Килештәрҙең мәғәнәләре һорауҙары ялғауҙары.

Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы һәм әйтелеше.

Исемдәрҙең хәбәрлек формаһы.

Исемдәрҙең эйәлек заты менән хәбәрлек формаһы араһындағы айырманы билдәләргә өйрәтеү.

Исемдәргә телдән һәм яҙып морфологик анализ яһарға өйрәтеү.

Сифат.

Сифаттың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик вазифаһы. Сифаттарҙың яһалыу юлдары.

Төп һәм шартлы сифаттар. Дәрәжәләре.

Сифаттарҙың исемләшеү осраҡтары.

Телмәрҙә синоним, күсмә мәғәнәле сифаттарҙы ҡулланырға өйрәтеү.

Сифаттарға телдән һәм яҙып морфологик анализ яһарға өйрәтеү.

Һан һәм уны телмәрҙә ҡулланыу.

Һандың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, һөйләмдәге вазифалары. Ябай һәм ҡушма һандар: уларҙың дөрөҫ яҙылышы. Цифрҙар менән бирелгән һандарҙың һәм уларҙың ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы.

Һан төркөмсәләре: төп һандар, тәртип һандары, бүлем һандары, сама һандары, йыйыу һандары, кәсер һандары.

Һандарҙың исемләшеп килеү осраҡтары, ул саҡта уларҙың һан, килеш , эйәлек заты ялғауҙарын ҡабул итеүе.

Һыҙыҡ аша яҙыла торған ҡушма һандарҙы дөрөҫ яҙыу күнекмәләрен нығытыу.

Һандарға телдән һәм яҙып морфологик анализ яһарға өйрәтеү.

Алмаш.

Алмаштың үтәгән вазифаһы,мәғәнә үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре. Алмаш төркөмсәләре:зат алмаштары, күрһәтеү алмаштары, һорау алмаштары, билдәләү алмаштары, билдәһеҙлек алмаштары, юҡлыҡ алмаштары.

Алмаштарҙың һан һәм килеш менән үҙгәреүе.Билдәһеҙлек һәм юҡлыҡ алмаштарының яһалышы

Бер һүҙҙе күп ҡабатлауҙан ҡотолоу өсөн телмәрҙә алмаштарҙы ҡулланырға өйрәтеү.

Ҡылым.

Ҡылым төркөмсәләре.

Исем ҡылым:мәғәнәһе һәм яһалышы

Уртаҡ ҡылым: мәғәнәһе һәм яһалышы

Сифат ҡылым. Уның мәғәнәһе. Сифат ҡылымдың заман формалары

Хәл ҡылым. Уның мәғәнәһе, төрҙәре.

Ҡылым йүнәлештәре. Ҡылымға дөйөм морфологик анализ яһай белеү

Рәүеш.

Рәүеш тураһында төшөнсә. Мәғәнәһе, морфологик билдәләре.
Рәүеш төркөмсәләре
Рәүештең сифат менән оҡшаш һәи айырмалы яҡтары. Рәүеш дәрәжәләре.
Рәүештәрҙең яһалышы. Тамыр һәм яһалма рәүештәр. Ҡушма рәүеш. Рәүештәрҙең яһалыу юлдары
Рәүештәрҙең мәғәнәһен, морфологик билдәләрен аңлата белеү
Теркәүестәр.
Теркәүестәр һәм уларҙың телмәрҙәге функцияһы. Теркәүестәрҙең бүленеше
Теркәүестәрҙең морфологик, синтаксик ролен аңлата белеү күнекмәһе. Теркәүестәре булған һөйләмдәрҙе анализлау күнекмәһен үҫтереү.
Бәйләүестәр.
Уларҙың телмәрҙәге вазифаһы. Бәйләүестәрҙең бүленеше, уларҙың синтаксик ролен билдәләй белеү. Бәйләүестәрҙе исемдәр янында ҡуллана белеү.
Киҫәксәләр.
Киҫәксәләрҙең морфологик билдәләре. Уларҙың бүленеше, морфологик һыҙаттарын, синтаксик вазифаларын билдәләй белеү. Киҫәксәләрҙе телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү
Мөнәсәбәт һүҙҙәр.
Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында төшөнсә. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең синтаксик роле. Телмәрҙә мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү.
Ымлыҡтар.
Ымлыҡтар тураһында төшөнсә. Ымлыҡтарҙың төрҙәре. Ымлыҡтарҙан һүҙҙәр яһалыу. Уларҙы телмәрҙә ҡулланырға һәм дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү.

8 класс

Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Ҡушма һөйләм. Синтаксис буйынса ике составлы һөйләмдәрҙе, тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе, айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙе ҡабатлау
Теҙмә ҡушма һөйләмдәр
1.Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә; уларҙа тыныш билдәләре.
2.Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү; ул төр ҡушма һөйләмдәргә синтаксик төпсөү яһай белеү.
Эйәртеүле ҡушма һәйләмдәр
1.Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү ысулдары: теркәүестәр, бәйләүестәр, килеш ялғауҙары, интонация, мөнәсәбәт һүҙҙәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре, улар эргәһендә тыныш билдәләре; эйә, хәбәр , аныҡлаусы, тултырыусы эйәрсән һөйләмдәр. Хәл һөйләмдәр: ваҡыт, урын, рәүеш, күләм-дәрәжә, маҡсат, сәбәп, шарт һәм кире эйәрсән һөйләмдәр.
Хәл эйәрсән һөйләмдәренең хәл әйтемдәренән айырмаһы (практик планда).
2.Һөйләм киҫәктәрен, айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе, хәл әйтемдәрен, эйәрсән һөйләмдәрҙе, теркәүесһеҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы телмәрҙә стилистик маҡсатта ҡулланыу күнекмәләре. Ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик һәм пунктуацион төпсөү күнекмәһен үҫтереү.
Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр
1.Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле.
2.Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәһе; шул уҡ тип һөйләмдәрҙе һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһен үҫтереү.

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Синтаксик һәм пунктуация буйынса ике составлы тарҡау ябай, бер нисә ябай һөйләмле ҡушма һөйләмдәр, ҡатмарлы һөйләм төҙөлмәләренән күп эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре тураһында ҡабатлау(6 сәғәт). Уҡытыусы уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып, V-VIII кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау ойоштора.
9 класс
Тел тураһында дөйөм төшөнсә
1.Йәмғиәт тормошонда телдең роле. Тел- үҫә барыусы ижтимағи күренеш. Башҡорт теле- башҡорт халҡының милли теле һәм уның башҡа ҡәрҙәш телдәр араһындағы урыны. Әҙәби тел һәм диалект тураһында дөйөм төшөнсә. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Ике теллелек.
2.Әҙәби тел нормаларын таный, уларға ярашлы һөйләй һәм яҙа белеү.
Башҡорт әҙәби теленең стилдәре
1.Стилистика тураһында дөйөм төшөнсә. Әҙәби телдең стилдәре: йәнле һөйләү стиле, фәнни, рәсми (эш ҡағыҙҙары), эпистоляр (хаттар), публицистик стилдәр, күркәм (художестволы) әҙәбиәт стиле. Уларҙың төп үҙенсәлектәре.
Һүрәтләү саралары- күркәм (художестволы) әҙәбиәт стиле саралары. Лексик һәм грамматик синонимдар.
2.Төрлө стилгә ҡараған текстар һайларға өйрәтеү. Стилистик яҡтан төҙөк һөм хаталы текстарҙы сағыштырып, уларға стилистик анализ яһарға өйрәтеү. (Уның өсөн газета, журналдарҙағы мәҡәләләрҙең стиль төрөн, әҙәби әҫәрҙәрҙең стиль үҙенсәлеген билдәләтеү, уларға стилистик төпсөү яһау эштәрен ойоштороу). Башҡорт теленән руссаға, руссанан башҡортсаға тәржемәләр яһатыу. Башҡортса һәм русса һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибен сағыштырыу, үтелгән эштәргә таянып, һығымта яһатыу.
Телмәр төҙөгәндә, стилистик маҡсатты күҙ уңында тотоп, синоним һүҙҙәрҙе, морфологик, синтаксик синонимдарҙы дөрөҫ һайларға һәм ҡулланырға өйрәтеү. (Уның өсөн проза һәм поэтик әҫәрҙәрҙә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибендәге үҙенсәлектәрҙе, уларҙың стилистик ролен билдәләтеү күнегеүҙәре эшләтеү, проза һәм шиғри әҫәрҙәрҙә һүрәтләү тасуирлау сараларын таптырыу, уларҙың телмәрҙәге стилистик функцияларын билдәләтеү эштәрен ойоштороу, һүрәтләү сараларын ҡулланыуҙы талап итеүсе яҙма эштәр үткәреү). Текстарҙан һүрәтләү сараларын таптырыу, һөйләү, яҙма телмәрҙә уларҙы ҡулланырға өйрәтеү.
V-IX кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системаға һалыу
Фонетика, орфоэпия, орфография (телмәр ағышындағы төрлө фонетик күренештәрҙең, ялғауҙарҙың, ҡушма һүҙҙәрҙең әйтелеше һәм яҙылышы)
Лексика
Морфология
Синтаксис һәм пунктуация

Уҡыу процессын уҡыу - уҡытыу методик һәм матди-техник яҡтан тәьмин итеү.
Материаль-техник ҡулланмалар
ноутбук
Өҫтәлмә әҙәбиәт:
Г.А. Иҫәнғолова,М.Ғ.Усманова,З.З.Солтанғолова.Башҡорт теленән диктантттар һәм изложениелар йыйынтығы.- Өфө: Китап, 2011
Ә.Ғ.Бейешев .Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы.- Өфө:Китап, 2013.
Т.Д. Вәлиева.Текст өҫтөндә эшләү өсөн дидактик материалдар. - Өфө: Китап, 2011.

Планлаштырылған һөҙөмтәләр.
Уҡыу йылы аҙағына 5-се класс уҡыусылары белергә тейеш төшөнсәләр:
Йәмғиәт тормошонда телдең роле.

Синтаксис, стилистика, тыныш билдәләре, текст, һөйләм, һүҙбәйләнеш, ҡушма һөйләм төшөнсәләре.
Фонетика, телмәр өндәре, ижек, һүҙ баҫымы, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, өндәрҙең бер-береһенә оҡшашыуы.
Орфоэпия, төп орфоэпик төшөнсәләр
Графика, алфавит, хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыу төшөнсәләре
Орфография. Һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы, әйтелеше. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.
Лексика. Һүҙҙең лексик мәғәнәһе. Синонимдар, антонимдар, омонимдар.
Тамыр, нигеҙ, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар.Тамырҙаш һүҙҙәр.
Һүҙьяһалыш юлдары.
Телмәр төрҙәре: хикәйәләү, тасуирлау, хөкөм йөрөтөү.
Уҡыу йылы аҙағына 6-сы класс уҡыусылары белергә тейеш төшөнсәләр:
һүҙҙең грамматик мәғәнәһе; тулы мәғәнәле һүҙҙәрҙең һан, эйәлек, килеш, хәбәрлек менән үҙгәреүе, һөйкәлеш, зат, заман, һүҙ төркөмдәрен классификациялау принциптары, үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре;
рус теленән үҙләштерелгән исемдәрҙең, сифаттарҙың дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы, ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы
эпиграф төшөнсәһенең билдәләмәһе
рәсми эш ҡағыҙҙары стиле хаҡында төшөнсә, эш ҡағыҙҙары стилендә телмәр этикеты
һүҙҙең грамматик мәғәнәһен билдәләү
үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен айыра белеү
рус теленән һәм башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙа белеү
ҡатмарлы план төҙөү, эпиграфты ҡуллана белеү, текст эсендәге һөйләмдәрҙе бер-
Уҡыу йылы аҙағына 8-се класс уҡыусылары белергә тейеш төшөнсәләр:
теҙмә ҡушма, эйәртеүле ҡушма, теркәүесһеҙ ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә, баш һәм эйәрсән һөйләм; эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре;
теҙмә ҡушма, эйәртеүле ҡушма, теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре;
-доклад, тезис, конспект, ғариза тураһында төшөнсәләр.

8 - се кластың аҙағына уҡыусылар түбәндәге күнекмәләрҙе үҙләштереп өлгөрөргә тейеш:
ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик, пунктуацион тикшеренеү үткәрә белеү;
үтелгән синтаксик төҙөлмәләрҙе телмәрҙең йөкмәткеһенә һәм стиленә ярашлы ҡуллана белеү;
8 - се класта үтелгән пунктограммаларҙы таный, таба белеү һәм тыныш билдәләренең ҡуйылышына аңлатма биреү;
айырымланған эйәрсән киҫәкле, хәл әйтемле, тура һәм ситләтелгән телмәрле ябай һөйләмдәрҙә, шулай уҡ теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белеү;
йәшәгән урынды, архитектура, тарих һәм сәнғәт ҡомартҡыларын тасуирлауға нигеҙләнгән инша яҙа белеү;
сағыштырыу юлы менән ике йәки бер нисә персонажға һәм әҙәби персонаждар төркөмөнә ҡылыҡһырлама яҙыу;
протокол төҙөй белеү;
изложениеларҙы һәм иншаларҙы темаһына, төп фекеренә,стиленә ярашлы камиллаштыра, уларҙа орфографик, пунктуацион, грамматик һәм телмәр хаталарын төҙәтә белеү.

Уҡыу йылы аҙағына 9-сы класс уҡыусылары белергә тейеш төшөнсәләр:

тел-аралашыуҙың иң мөһим саралары;
йәмғиәт тормошонда телдең урыны;
тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш;
башҡорт теле, уның башҡа ҡәрҙәш телдәр араһындағы урыны;

һүрәтләү саралары;
әҙәби тел, диалект, башҡорт әҙәби теле;
стилистика тураһында төшөнсә, башҡорт әҙәби теленең стилдәре.

**Башҡорт теле. Календарь-тематик план. 6-сы класс. 2025/2026 уҡыу йылы**

| № | Дата | Факт | Темалар | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 01.09. | | Туған тел тур-да әңгәмә | |
| 2 | 03.09. | | **Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.** Синтаксис. Пунктуация. Фонетика Графика | |
| 3 | 08.09. | | Лексика. Һүҙьяһалыш, орфография | |
| 4 | 10.09. | | **Диктант. Ылаусылар.** | |
| 5 | 15.09. | | **Лексика.** Лексика тураһында төшөнсә. Баш.теленең һүҙлек составы. | |
| 6 | 17.09. | | Башҡорт әҙәби теленең дөйөм һәм тар ҡулланылышлы һүҙҙәре. | |
| 7 | 22.09. | | Профессиональ һүҙҙәр. .Диалект һүҙҙәре. | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 8 | 24.09. | | *Иҫкергән һүҙҙәр, яңы һүҙҙәр.* | |
| 9 | *29.09.* | | Фразеологик берәмектәр | |
| 10 | **01.10.** | | **Исем.** Үтелгәндәрҙе kабатлау. *Исемдәрҙең һан м-н үҙгәреше.* Күплек ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы. | |
| 11 | 06.10. | | *Исемдәрҙең эйәлек заты. Эйәлек заты ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы* | |
| 12 | *08.10.* | | Исемдәрҙең хәбәрлек заты. | |
| 13 | 13.10. | | *Исемдәрҙең килеш м-н үҙгәреше.* Килештәрҙең мәғәнәләре. Төп килеш. . | |
| 14 | *15.10.* | | Килештәрҙең мәғәнәләре. Төп килеш | |
| 15 | 20.10. | | **Контроль диктант. Аҫылташтар иле.** | |
| 16 | 22.10. | | Хаталар өҫтөндә эш. Эйәлек килеш. | |
| 17 | 03.11. | | *Төшөм килеш.* | |
| 18 | *05.11* | | **Изложение. Урманда.** | |
| 19 | 10.11. | | Төбәү, урын-вакыт, сығанаk килештәр. | |
| 20 | 12.11. | | «Исем» темаһы б-са үтелг. kабатлау . | |
| 21 | <u>**17.11.**</u> | | <u>**Сифат.**</u> Сифаттарҙың һөйләмдәге роле һәм исем урынында kулланылыуы. | |
| 22 | 19.11. | | Сифаттарҙың яһалышы . Төп һәм шартлы сифаттар. | |
| 23 | 24.11. | | Сифат дәрәжәләре. | |
| 24 | 26.11. | | Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы. Синоним сифаттар. | |
| 25 | 01.12. | | «Сифат» темаһын kабатлау. Сифаттарға грамматик анализ. | |
| 26 | **03.12.**<br>**08.12.** | | **Изложение. Башкорт кейеме.** | |
| 27 | **10.12** | | **Һан.** Һан тураһында төшөнсә.<br>Ябай һәм kушма һандар. | |
| 28 | 15.12. | | Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы | |
| 29 | 17.12. | | Үлсәү һүҙҙәре. | |
| 30 | 22.12. | | **Контроль диктант. Ауыр ҡапҡаның сере** | |
| 31 | 24..12. | | **Хаталар өҫтөндә эш.** «Һан» темаһын kаб-у һәм системалаштырыу. Һандарға грамматик анализ. | |
| 32 | 29.12. | | **Алмаш.** Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы, мәғәнә үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре. Алмаш төркөмсәләре | |
| 33 | **12.01.** | | **Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше.**<br>Мин, һин, был,ул,шул алмаштарының килеш м-н үҙгәреше | |
| 34 | **14.01.** | | Минеке, һинеке, уныkы, үҙе алмаштарының килеш м-н үҙгәреше. | |
| 35 | 19.01 | | Кемдер, ниҙер, тегелер алмаштарының килеш м-н үҙгәреше. «Алмаш»темаһын kабатлау. Алмаштарға грамматик анализ.. | |
| 36 | 21.01 | | **Ҡылым.** Түбән синыфтарҙа үтелгәндәрҙе kабатлау | |
| 37 | 26.01. | | Ҡылым төркөмсәләре. Исем kылым. | |
| 38 | 28.01. | | Уртаk kылым. Сифат kылым. | |
| 39 | 02.02. | | Сифат kылымдарҙың үткән, хәҙерге, киләсәк заман формалары. | |
| 40 | 04.02. | | Сифат kыл-ҙы хәбәр һөйкәлеше kылымдарынан нисек айырырға? | |
| 41 | 09.02. | | Хәл kылым. Хәл kылымдың төрҙәре. | |
| 42 | 11.02. | | **Инша. 251-се күн.буйынса. Ат-башkорттоң юлдашы.** | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 43 | 16.02. | | Ҡылым йүнәлештәре. Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге. | |
| 44 | 18..02. | | «Ҡылым» темаһын kабатлау, системалаштырыу. Ҡылымдарға грамматик анализ. | |
| 45 | 25.02. | | **Изложение. Ҡоралайҙар.** | |
| 46 | **04.03.** | | **Контроль диктант. Серле kая.** | |
| 47 | **09.03.** | | **Рәүеш тураһында төшөнсә.**<br>Рәүештең белдергән мәғәнәһе. Морфологик, синтаксик функцияһы. | |
| 50 | 11.03 | | Рәүеш төркөмсәләре. | |
| 51 | 16.03. | | Рәүештең сифат м-н оkшаш һәм айырмала яktары. | |
| 52 | 18.03. | | Рәүеш дәрәжәләре. | |
| 53 | 23.03. | | Рәүештәрҙең яһалышы. | |
| 54 | 25.03 | | Рәүештәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | |
| 55 | 06.04. | | «Рәүеш» темаһын kабатлау.<br>Рәүештәргә грамматик анализ тәртибе. | |
| 56 | 08.04. | | **Изложение. Айыу**. | |
| 57 | 13.04. | | **Диктант**. Тракторсы Алтынбикә. | |
| 58 | **15.04.** | | **Хаталар өҫтөндә эш.** Теркәүес тураһында төшөнсә.Теркәүестәрҙең бүленеше. | |
| 59 | 20.04. | | Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. «Теркәүес» темаһын ҡабатлау | |
| 60 | 22.04. | | **Бәйләүес.** Бәйләүестәр тураһында дөйөм төшөнсә.Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге функцияһы. | |
| 61 | 27.04. | | Бәйләүестәрҙең бүленеше. «Бәйләүес» темаһын kабатлау. | |
| 62 | **29.04.** | | **Киҫәксә.** Киҫәксә тураһында төшөнсә. Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы | |
| 63 | 04.05. | | **Мөнәсәбәт һүҙҙәр** | |
| 64 | **06.05.** | | **Ымлыктар** | |
| 65 | **11.05.** | | **Оҡшатыу һүҙҙәре** | |
| 66 | **13.05.** | | **Үтелгәндәр буйынса тест** | |
| 67 | **18.05** | | **Контроль диктант. Кәҫле.** | |
| 68 | **20.05** | | **Үтелгәндәрҙе ҡабатлау** | |
| 69 | **25.05** | | Йомғаҡлау дәресе | |

| № | ТЕМАЛАР | Дата | Фактик дата |
|---|---|---|---|
| 1 | **Тел тураһында дөйөм төшөнсә.** Тел фәнен ни өсөн мотлаk өйрәнергә кәрәк? Тел тураһында дөйөм төшөнсә. | 02.09. | |
| 2 | Тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш. | 09.09. | |
| 3 | Башkорт теле – башkорт халkының милли теле. Башkорт теле башkа kәрҙәш телдәр араһында. | 16.09. | |
| 4 | Әҙәби тел һәм диалект. Башkорт теленең диалекттары. | 23.09. | |
| 5 | Башkорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Ике теллелек. | 30.09. | |
| 6 | **Башkорт теленең стилдәре**. Телмәр мәҙәниәте. Функциональ стилдәр. Уларҙың төп үҙенсәлектәре. Йәнле һөйләү стиле. | 07.10. | |
| 7 | **Контроль диктант. Төрлө дуҫтар була.** | 14.10. | |
| 8 | Матур әҙәбиәт стиле. Хаталар өҫтөндә эш. | 21.10. | |
| 9 | Фәнни стиль | 11.11. | |
| 10 | Фәнни – популяр әҙәбиәт. | 18.11. | |
| 11 | Публицистик стиль. | 25.11. | |
| 12 | Рәсми эш kағыҙҙары стиле. | 02.12. | |
| 13 | Хаттар стиле. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Стилдәр. | 09.12. | |
| 14 | **Контроль диктант. Халыҡ улы.** | 16.12. | |
| 15 | Хаталар өҫтөндә эш. Тикшереү эше. Стилдәр. | 26.12. | |
| 16 | **Һүрәтләү саралары.** Эпитет. | 30.12. | |
| 17 | Сағыштырыу. | 13.01. | |
| 18 | Телмәр үҫтереү**.** Изложение. Тылдың ярҙамы. | 20.01. | |
| 19 | Исем метафора. Ҡылым метафора. | 27.01. | |
| 20 | Метафора. Гипербола. | 03.02. | |
| 21 | Синонимдар. Уларҙы телмәрҙә kулланыу. | 10.02. | |
| 22 | Грамматик синонимдар. | 17.02. | |
| 23 | Тасуирлауҙа антитезаны файҙаланыу. | 24.02. | |
| 24 | Лексика. Башkорт теленең һүҙлектәре. | 03.03. | |
| 25 | Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ kулланыу. | 10.03. | |
| 26 | **Контроль диктант. Тел һәм тарих.** | 17.03. | |
| 27 | **Хаталар өҫтөндә эш.** Һүҙьяһалыш. Морфология. Орфография. | 24.03. | |
| 28 | Синтаксис. Пунктуация. | 07.04. | |
| 29, 30 | Телмәр үҫтереү. Изложение. Һабантуй. | 14.04-21.04. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 31 | Ҡабатлау. Синтаксис. Пунктуация. | 28.04. | |
| 32 | **Контроль диктант. Ҡаһарманлыкты данлаусы ҡобайыр**. | 05.05. | |
| 33 | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡабатлау. Синтаксис. Пунктуация. | 12.05. | |
| 34 | Йомғаҡлау | 19.05. | |

**Календарь-тематик план. Башҡорт теле. 9-сы класс. 2025/2026 уҡыу йылы**

| | Темалар | Дата | Фактик дата |
|---|---|---|---|

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Телде һаҡлау –беҙҙең изге бурысыбыҙ.. | 03.09. | |
| 2 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Синтаксис. | 05.09. | |
| 3 | Бер,ике составлы һөйләмдәр. | 10.09. | |
| 4 | Тура һәм ситләтелгән телмәр. | 12.09. | |
| 5 | Айырымланған эйәрсән киҫәктәр | 17.09. | |
| 6 | Диктант ”Беҙҙең яҡ маризары”. | 19.09. | |
| 7 | Ҡушма һөйләм. | 24.09. | |
| 8 | Теҙмә ҡушма һөйләм. | 26.09. | |
| 9 | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. | 01.10. | |
| 10 | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы | 03.10. | |
| 11 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр | 08.10. | |
| 12 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 10.10 | |
| 13 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 15.10. | |
| 14 | Контроль диктант “Яугир менән ат” | 17.10. | |
| 15 | Хаталар өҫтөндә эш. Йомғаҡлау.”Теҙмә ҡушма һөйләмдәр”. | 22.10. | |
| 16 | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.Баш һәм эйәрсән һөйләм. | 24.10. | |
| 17 | Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә эйәреү саралары. | 05.11. | |
| 18 | Эйә һөйләм | 07.11. | |
| 19 | Хәбәр һөйләм | 12.11. | |
| 20 | Аныҡлаусы һөйләм | 14.11. | |
| 21 | Тултырыусы һөйләм | 19.11. | |
| 22 | Телмәр үҫтереү.Изложение. “Сыңрау торна” | 21.11. | |
| 23 | Ваҡыт һөйләм | 26.11. | |
| 24 | Урын һөйләм | 28.11. | |
| 25 | Рәүеш һөйләм | 03.12. | |
| 26 | Күләм-дәрәжә һөйләм | 05.12. | |
| 27 | Сәбәп һөйләм | 10.12. | |
| 28 | Маҡсат һөйләм | 12.12. | |
| 29 | Шарт һөйләм | 17.12. | |
| 30 | Контроль диктант. ”Бәхетле ҡартлыҡ ”. | 19.12. | |
| 31 | Хаталар өҫтөндә эш. Кире һөйләм | 24.12. | |
| 32 | Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау | 26.12. | |
| 33 | Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе сараларҙы үҙләштереүҙе нығытыу. | 14.01. | |
| 34 | Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе сараларҙы үҙләштереүҙе нығытыу, дөйөмләштереү. | 16.01. | |
| 35 | “Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр” темаһын ҡабатлау | 21.01. | |
| 36 | Эйәрсән һөйләм төрҙәре буйынса зачет | 23.01. | |
| 37 | Телмәр үҫтереү. Изложение. “Мишка” тексы буйынса. | 28.01. | |
| 38 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр | 30.01. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 39 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | 04.02. | |
| 40 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | 06.02. | |
| 41 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр | 11.02. | |
| 42 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре | 13.02. | |
| 43 | Теҙемдәр | 18.02. | |
| 44 | Диктант. “Үҙ ереңдә ятһын һөйәгең” | 20.02. | |
| | “Ҡушма һөйләм”темаһын ҡабатлау | | |
| 45 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе ҡабатлау | 25.02. | |
| 46 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе ҡабатлау | 27.02. | |
| 47 | Изложение “Ир ҡанаты.” | 04.03. | |
| 48 | Йомғаҡлау.Синтаксис | 06.03. | |
| 49 | Пунктуация | 11.03. | |
| 50 | Контроль диктант “Ҡурайсы” | 13.03. | |
| 51 | Хаталар өҫтөндә эш.Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре | 18.03. | |
| 52 | Өтөр ҡуйылыу осраҡтары | 25.03. | |
| 53 | Өтөр ҡуйылыу осраҡтары | 27.03. | |
| 54 | Нөктәле өтөр ҡуйылыу осраҡтары | 08.04. | |
| 55 | Һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтарын ҡабатлау | 10.04. | |
| 56 | Ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары | 15.04. | |
| 57 | Ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары | 17.04. | |
| 58 | Тыныш билдәләре ҡуйылышын дөйөмләштереү | 22.04. | |
| 59 | Диктант. “Әйле ырыуы” | 24.04. | |
| 60 | V-VIII класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 29.04. | |
| 61 | Фонетика. Морфология. Синтаксис | 06.05. | |
| 62 | Тест һорауҙарына яуаптар | 08.05 | |
| 63 | Изложение “Әсә” | 13.05. | |
| 64 | Контроль диктант “Дала кисе” | 15.05. | |
| 65 | Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 20.05. | |
| 66 | Йомғаҡлау. | 22.05. | |

Календарь-тематик план. Башҡорт теле. 8-се класс. 2025/2026